Ауырғазы районының
Муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Талбазы ауылы Лицейы

# Илем һулышын тоям

Эшләне: Өмөтбаева Элнара
5-се класс уҡыусыһы.

Был донъяға килгән һәр бер кеше үҙ ғүмере менән йәшәй, үҙ тормошон үҙе күрә, яҙмышын үҙе үтә. Кемдәрҙер үҙ яҙмышы барышында күп изгелектәр эшләй, донъяны матурлай. Шуға ла уның исеме тарихта, кешеләрҙең һәм туғандарының хәтерендә ҡала. Һәр халыҡ үҙенең күренекле шәхестәре менән ғорурлана.

Мин бишенсе класс уҡыусыһы. Күренекле яҡташыбыҙ Рәшит Назаров шиғырҙарын яратып уҡыйым. Бигерәк тә “Йөрәк”, “Офоҡтағы ҡояш” тигән шиғырҙары оҡшай.

Тәбиғәт Рәшит Назаровҡа зирәк аҡыл да, ярһыулы йөрәк тә, һағышлы күңел дә биргән. Шағирҙың һәр шиғыры донъяла йәшәргә өйрәтә, ул үҙе лә тормошҡа һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә ҡарай. “Шағир булып тәрбиәләнмәйҙәр, шағир булып тыуалар” тигән әйтем бар халыҡта. Был һүҙҙәр нәҡ Рәшит Назаров өсөн генә әйтелгән, тиерһең. Уның шиғырҙары башҡорт халыҡ ижадының иң гүзәл ынйыларына тиң. Ул ғәҙәти тип иҫәпләнгән әйберҙәрҙе лә шиғырҙарында оло мәғәнә һалып бирә алған.

Рәшит Назаров бар булмышы менән халыҡ шағиры. Уның ижады бөгөнгө көндә лә ҡабатланмаҫ моң булып халыҡ күңелендә йәшәүен дауам итә.

Назаров шиғриәте – ысын мәғәнәһендә кешеләрҙе уйландырыусы, ғәҙеллекте һәм яҡтылыҡты алға һөрөүсе, тыуған еребеҙҙең рухи ауаздарын быуындарҙан быуындарға тапшырыусы, тыуыр йылдарға еткереүсе мәңге яңғырар аҫыл шиғриәт өлгөләре ул.

Әлеге көндә лә уның илһамлы рух ҡошо күңелдәрҙе сафлыҡҡа биҙәй, киләсәккә өмөттәр уята. Эйе, ошо сафлыҡҡа ынтылып, уның рухында ҡайнап районыбыҙҙа төрлө саралар үткәрелә. Төрөмбәт ауылында уның музейы һәр килгән ҡунаҡты ҡаршыларға әҙер. Йондоҙ бейеклегенә ҡәҙәр күтәрелгән шағирыбыҙҙың тиңһеҙ талант серҙәренә төшөнәһе, уның илаһилығын асаһы көндәр ҙә, моғайын, алдалыр әле...

Яҡташыбыҙ, шағир Р. Назаров шиғриәтенә һоҡланып, уның менән ғорурланып күңелгә шиғыр килә:

Районыбыҙ ғорурлығы

Башҡортостан – гүзәл ерем,
Минең тыуған үҫкән илем.
Йырсыларға, шағирҙарға,
Сәсәндәргә бай ерем.

Башҡортостаным шағиры –
Яҡташыбыҙ Рәшит ағай.
Бөтә халыҡ ғорурлығын,
Ҡәҙер-хөрмәтте яулай.